# Каникулдың тәүге көнөн ҡаршылап



Уйын-көлкөнән һуң.



Байрамды алып барыусы Әклимә Рәжәпова апайҙары менән бәйге ваҡытында.



Гөлнәзирә Әхтәмова.

Район мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре район китапханаһы менән берлектә йәйге каникулдың тәүге көнөндә үк балалар өсөн уйын-көлкө байрамы ойошторҙо. Был күңелле сарала Таһир Күсимов исемендәге гимназияның һәм Асҡарҙағы 1-се мәктәптең III, IV синыф уҡыусылары менән балалар баҡсаһына йөрөүсе кескәйҙәр ҙә ҡатнашты. Әклимә Миҙхәт ҡыҙы Рәжәпова улар өсөн ниндәй генә уйындар үткәрмәне лә ниндәй конкурстар ойошторманы! Был йәһәттән Таһир Күсимов исемендәге гимназияның IV «Б», IV «В», IV «Г» синыфы уҡыусылары иң әүҙемдәре булды. Балалар уйын-көлкө бәйгеһендә генә ҡатнашып ҡалманы, йыр-бейеү буйынса ла үҙҙәренең һөнәрҙәрен күрһәтте. Тамашасыларға бигерәк тә Ләйсән Зәйнуллинаның хәҙерге заман бейеүе менән «Сулпылар» балалар баҡсаһында шөғөлләнеүсе Гөлнәзирә Әхтәмованың башҡорт телендә яңғыраған шиғыры оҡшаны.

Әйткәндәй, күптән түгел Гөлнәзирә «Мостай Кәримде уҡыйбыҙ», «Балаларға Бөйөк Ватан һуғышы тураһында» тип аталған халыҡ-ара акцияларҙа ҡатнашып, интернет-конкурстың Маҡтау грамотаһы менән сертификатына лайыҡ булғайны. Китапхана хеҙмәткәре Ғәлиә Рәйес ҡыҙы Бәшәрова ла был һәләтле ҡыҙ тураһында бик күп маҡтау һүҙҙәре әйтте.

– Ысынлап та, хәҙерҙән үк төрлө бәйгеләрҙә ҡатнашып йөрөү буласаҡ уҡыусыға ҙур этәргес булып тора. Киләсәктә лә Гөлнәзирәнең еңеүҙәр яулап, мәктәптең ғорурлығы булып китеренә ышаныс ҙур, – тине ул кескәй ҡыҙҙың уңыштары өсөн һөйөнөп.

Уйын-көлкө һуңында балалар күмәкләп фотоға төштө, үҙҙәренең яратҡан йырҙарын башҡарҙы. Һау-сәләмәт булыу, мәктәптә тик яҡшы билдәләргә генә өлгәшеү – бына ошондай теләктәрен әйтеп хушлашты буласаҡ дүртенсе һәм бишенсе синыф уҡыусылары.

**З. ОМОРҘАҠОВА.**
*Әбйәлил районы, Асҡар ауылы.*

Йәншишмә – 2019 – 7 июнь